Башҡортостан Республикаһы.
Ауырғазы районы муниципаль районы
муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы
Талбазы ауылы лицейы

# Минең урам атамаһы.
# (Бәхти Ғайсин исеме мәңгеләштергән урам.)

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса
ғилми-тикшеренеү эше.

Әҙерләне: 7 - се класс уҡыусыһы
Әминева Регина.
Етәксеһе:башҡорт теле һәм әҙәбиәте
уҡытыусыһы Ғүмәрова А.Ә.

Талбазы

# Инеш.

Ауырғазы районының үҙәге – Талбазы. Ауыл исеменең килеп сығышына бәйле бик күп варианттар (версиялар) бар.  Шуларҙың береһе тирә-яҡтағы күлдәрҙе уратып алған талдарға бәйле.

1865 йылға тиклем Талбазы ауылы Ырымбур губернияһы Стәрлетамаҡ өйәҙенә ҡарай. Уны икегә бүлгәс, Талбазы Өфө губернияһы Стәрлетамаҡ өйәҙенә ҡушыла.

1930 йылдан башлап ауыл Яңы Ҡарамалы районы составына индерелә.

1940 йылда районға Ауырғазы исеме бирелә, ә Талбазы уның административ үҙәге булып һанала.

Талбазы ауылында 12000 тирәһе кеше йәшәй. Бында башҡорт, татар, урыҫ, сыуаш, украин, мордва һәм башҡа милләт кешеләре дуҫ, татыу йәшәйҙәр.

Талбазы көньяҡ-көнбайыш,  төньяҡ-көнсығыш һәм Софиполь микрорайонына бүленгән.  Талбазы ауылында 80-дән артыҡ урам иҫәпләнә, уларҙың күбеһе билдәле революционерҙар,  ғалимдар, яҙыусылар,  һуғыш геройҙары исемен йөрөтә.

Ауыл, күбеһенсә, кирбес һәм ағастан һалынған йорттарҙан тора, ике- өс ҡатлы йорттар ҙа бик күп.

Һәр бер исемле урам – үҙе бер тарих.  Бында бөйөк кешеләрҙең яҙмыш һептәре сағыла.  Мине ошо урам тарихтары,  урам исеме ҡушылған кешеләрҙең биографияһы ҡыҙыҡһындыра.  Ғилми-тикшеренеү эшем үҙем йәшәгән Бәхти Ғайсин урамына арналған.

**Эштең актуаллеге**:  тыуған ауылым урамдарының атамаһын өйрәнеү, тарихҡа байҡау яһау.  Үҙем тыуып-үҫкән, йәшәгән урамымдың  исем тарихын белеү, минең өсөн ҙур әһәмиәткә эйә. Тарихты белмәү, үҙ-үҙеңде һанға һуҡмау тигән һүҙ.

**Эшемдең маҡсаты:**

1. Бәхти Ғайсиндың тормош һәм ижад юлына байҡау яһау.
2. Кәрәкле мәғлүмәттәрҙе табырға өйрәнеү.

**Эштең бурыстары:**

1. Урам исеменең билдәле шәхес исеме менән бәйле булыуын дәлилләү.
2. Бәхти  Ғайсиндың тормош юлын өйрәнеү.

**Гипотеза.**

Урам исеме Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған артисы Бәхти Ғайсин исеме менән бәйле.

Тикшеренеү барышында тарихи метод,  күҙәтеү методтары ҡулланылды.

**Эштең структураһы.**

Тикшеренеү эше инеш, ике бүлектән, йомғаҡлау өлөшөнән,   ҡулланылған әҙәбиәттән тора.

# 1бүлек. Бәхти Ғайсин исемендәге урам.

Танылған композитор исемен йөрөткән урам (ул Кешәннегә табан һуҙыла) яңы урамдарҙың береһе. Ул төньяҡ микрорайонында урынлашҡан. Урам билдәле яҡташыбыҙ, Башҡортостандың халыҡ артисы, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, композитор Бәхти Ғайсин исемен мәңгелләштереү маҡсатынан аталған.

Урамдың тарихы 1997 йылдарҙа башлана. Тәүҙә бер нисә өй һалына. Ул төньяҡ микрорайонында урынлашҡан йәш райондарҙың береһе.

2005 йылдарҙа төҙөлөш эштәре ныҡлап башлана. Мин йәшәгән урам үҙенең кирбестән һәм ҡарағайҙан һалынған мөһабәт йорттары менән күркәм. Ул йылдан-йыл үҫә, матурлана. Әлеге көндә 45-ләп йорт бар.

Урам юҡҡа ғына композитор исемен йөрөтмәйҙер.

Бында яҡташыбыҙ кеүек тырыш, эшһөйәр, маҡсатҡа ынтылыусан кешеләр йәшәй. Уларҙың күбеһе йәштәр. Йәй көнө бала-саға тауышынан урам гөрләп тора.

# 2 бүлек. Исеме телдә, моңо күңелдә.

Тыныс ҡына ағып ятҡан Ашҡаҙар буйҙарынан әллә ни алыҫ түгел Кешәнле ауылы урынлашҡан. Бәхти Ғайсин унда 1930 йылдың ғинуарында донъяға килгән, Миңнейәр менән Хәтимә апай ғаиләһендә тәүге бала. Исем ҡушырға Солтанморат ауылынан Ғәлимйән Ибраһимовтың атаһы Ғирфан мулла килә. Буласаҡ композиторға Бәхтиғәни исемен ҡушалар. Бәхтиғәни ғәрәпсә “ киң бәхетле” тигән һүҙ.

1937 йылда Ғайсиндар ғаиләһе Өфөгә күсәләр. Әммә ҡалала оҙаҡ тора алмайҙар. Һуғыш сығып китә. Бәхти Ғайсиндың атаһы Миңнейәр фронтҡа китеп һәләк була, ай ҙа үтмәй, әсәһе Хәтимә тиф ауырыуынан үлеп китә. Бәхти Ғайсин ике туғаны менән етем ҡала. Уларҙы Талбазы балалар йортона урынлаштыралар. Бында Бәхти Ғайсин яҡшы уҡый, төрлө музыка ҡоралдарында уйнарға өйрәнгән. Айырыуса, гармунда яҡшы уйнаған.

Балалар йортонан уны Өфөләге 5-се интернат-мәктәпкә ебәрәләр.1945-1948 йылдарҙа Стәрлетамаҡ ҡалаһында һөнәрселек училищеһында слесарь һөнәрен үҙләштерә.

Милли моңдарға ғашиҡ егет Өфө музыка училищеһына уҡырға керә.1953 йылда уҡыуын тамамлағандан һуң Башҡорт академия театрында концертмейстер итеп эшкә ҡалдырыла. Спектаклдәрҙә аккордеонда уйнай, үҙе лә көйҙәр сығара башлай.

Бәхти Ғайсин үҙ ижадында туҡтауһыҙ эҙләнә, күп көйҙәр һала. Күп кенә әҫәрҙәрен ҡатыны, йырсы Фәриҙә Ҡудашева өсөн ижад итә. Бына уларҙың ҡайһы берҙәре: “Ниңә, иркәм” , “Гел генә” , “Бөгөлә ҡайын”, “Һаубуллашыу йыры”, “ Һары һандуғас, ҡара ҡарлуғас” ,”Ике аҡҡош” һәм башҡалар.

Танылған композитор ҡайҙа ғына йөрөмәһен, эше нисек кенә күп булмаһын, тыуған яғын онотмай. Концерттар менән йыш килеп тора. Ғүмеренең һуңғы көҙөндә Кешәннегә ҡайтып, музыка классы аса, уйын ҡоралдары ала, йыр-моңға һәләтле балаларҙы йыйып, уларҙы уҡыта.

1962 йылда Бәхти Ғайсинға Башҡорт АССР-ның халыҡ артисы тигән юғары исем бирелә. Һуңынан "Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы" исемен йөрөтә. Ваҡытһыҙ үлем уны 1991 йылдың 5 октябрендә яҡты донъянан алып китә.

Әле беҙҙең арала булмаһа ла, исеме халыҡ телендә. 1997 йылдан Талбазы музыка мәктәбе Бәхти Ғайсин исемен йөрөтә башлай. Музыка мәктәбендә лицей уҡыусылары ла шөғөлләнә, йырларға, төрлө музыка ҡоралдарында уйнарға өйрәнә. Йәш музыканттар Бәхти Ғайсин исемен йөрөткән мәктәптә шөғөлләнә алыуҙары менән, әлбиттә, ғорурланалар.

# Йомғаҡлау.

Тикшеренеүҙәр барышында алдыма ҡуйған бурыстар тулыһынса үтәлде тип уйлайым. Талбазы ауылының төньяҡ микрорайонында урынлашҡан урамды, күренекле композитор Бәхти Ғайсин биографияһын өйрәндем. Әлбиттә, был эшемде артабан да дауам итәсәкмен.

Талбазы ауылы урамдары йылдан-йыл матурлана, үҫә, яңы өйҙәр төҙөлә. Әммә, ҡыҙғаныսҡа ҡаршы, насар күренештәр ҙә бик күп. Тәбиғәт юҡҡа сығып бара. Йылға-күлдәр ҡорой, ағастар киҫелә. Киләсәк беҙҙең ҡулда. Беҙ, йәш быуын, үҙебеҙ йәшәгән ауылды, урамды таҙалыҡта, тәртиптә торорға тейешбеҙ.

Эшемде йомғаҡлап, шуны билдәләп үтәһе килә: ауыл, ер-һыу атамаларын йыйыу - белеү барыбыҙ өсөн дә бик мөһим эш.

Ғорур итеп, беҙ Бәхти яҡташтары тип әйтәһе килә.

Ауырғазы районы муниципаль районының

муниципаль дөйөм белем биреү учреждениеһы Талбазы ауылы Лицейы

"Башҡорт аты" темаһына ғилми тикшеренеү эше

Башҡарҙы: 7 класс уҡыусыһы Ғилмүтдинов Эмил

Етәксеһе: башҡорт теле уҡытыусыһы Ғүмәрова А.Ә.

**Эштең йөкмәткеһе**:

1.Инеш

2.Аттарҙың барлыҡҡа килеүе

3.Башҡорт атының төрлө һуғыштарҙа ҡатнашыуы

4. Ҡымыҙ- сихри эсемлек

5.Ат образы

6.Ҡулланылған әҙәбиәт

## Инеш.

Ат тарихына биш мең йыл һанала, уньң алтын быуаты үткән. Ул ваҡыт тик йырҙарҙа һәм әкиәттәрҙә ҡала .Фән һәм техника үҫешенә ҡарамаҫтан, ат һаманда эйәр өҫтөндә лә, егеүле килеш тә, геология өлкәһендә лә, ҡымыҙ фермаһында ла, медицинала ла, спортта ла, туризмда ла алмаштырғыһыҙ булып һанала. Аттар хатта бактериологик институтында ла алмаштырғыһыҙ эшселәр ролен башҡаралар. Улар беҙгә столбняк, гангрена, дифтерия, ботулизм кеүек ҡурҡыныс сирҙәрҙән ҡотолорға ярҙам итә. Быныӊ өсөн иммунитетлы аттарҙың ҡанын алалар һәм унан сыворотка яһайҙар. Ат менән аралашып та кеше яҡшыраҡ, рухи яҡтан бай була.

Ат кешенең донъяһына легенда, йыр, әкиәт, әйтем йәки теләгән уйынсыҡ булып килеп керә.

Кешелек тарихындағы иң ҡурҡыныс һәм һәләкәтле егермenсе быуат тамамланды. Меңәрләгән быуат тарихы үткән башҡорт атына был бик ҡыҫҡа ваҡыт. Егерме беренсе быуатта уны нимә көтә - билдәһеҙ.

Минең эшемдең темаһы: Башҡорт аты.
Маҡсатым: аттың килеп сығышын, ат тоҡомдарын, аттың файҙаһын өйрәнеү



**Ат тураһында беренсе мәғлүмәт.**

Илле миллион йыл самаһы элек Төнъяҡ Америка һәм Европаның кңн һаҙлыҡлы урмандарында бәләкәй генә хайуандар күренә. Уларҙың бейеклеге утыҙ см тирәһе була. Улар тиҙ йөрөшлө аяҡлы була- алғы аяҡтарында дүртәр бармаҡ һәм алғы аяҡтарҙа өсәр бармаҡ була, муйындары бик ҡыҫҡа, бөгөлөп торған арҡалы, оҙон ҡойроҡло был аттарҙы гирокотерий тип атайҙар. Һуңыраҡ бер үҙгәреш кисереп мезогиппус барлыҡҡа килә.

Аттар әкренләп урмандарҙан асыҡ яланға сыға башлай.

Аҙағыраҡ пони бейеклегендә ат барлыҡҡа килә, уны меригиппус тип атайҙар.

Илле миллион эсендә ат бик ныҡ үҙгәреш кисерә. Аттарҙың өс бармаҡлылары юғалып, плиогиппус барлыҡҡа килә. Был хайуандарзың һәр бер аяғында уртансы бармағы оҙонораҡ була һәм тояҡ булып бөтә.

Беҙҙең быуатҡа тиклем өс мең йыл элек Көньяҡ Урал далаларында ҡырағай ат көтөүе йөрөй. Уларҙың сапҡан тауышы Уралдан Балкандарға тиклем ерҙе һелкеткән. Был ваҡытта кешеләрзең йорт хайуандары булған, ә иң кулға эйәләшкәндәрҙән ат һаналған. Боҙлоҡ ваҡытынан һуң мамонттар, йөнтәҫ носорогтар, мәмерйә айыуҙар юҡҡа сыҡҡан, әммә үҙенең түҙемлелегенә һәм ҡар аҫтынан аҙыҡ таба алыуына күрә аттар һакланып ҡала. Атһыҙ Башҡортостандың тарихын күҙ алдына килтереп булмай. Әммә элекке замандарҙа күп кенә кейектәр, хайуандар, ҡоштар йә кеше тарафынан ҡырылып, йә йот- фәлән арҡаһында һәләк булған, тоҡомдары ҡороған. Элекке ҡырағай аттар- тарпандар, ҡоландар шулай уҡ беҙҙең заманғаса һакланмаған, ҡырып бөтөрөлгән. Ырымбур далаларында тарпан тоҡомло ат булған. Ләкин кешеләрҙең битарафлығы арҡаһында улар үлемгә дусар була. Был турала Ғайса Хөсәйенов « Һуңғы тарпан” хикәйәтендә һүрәтләй. Бынан йөҙ илле- ике йөҙ йылдар элек булған тарпан тоҡомдарының ауыр хәлдә тереклек итеп, иң һуңғыларынында нисек һәләк булыуы һүрәтләнә. Һуңғы өйөр тарпандар кеше ҡулына эйәләшергә теләмәй Һәм кешеләр уларҙың тәмле ите өсөн уларға һунар итеп, ҡырып бөткәндәр.

Ат кешенең рухи мәҙәниәтенең бер өлөшөнә әуерелә. Элек беҙҙең ата-бабаларыбыҙ атты алла урынына күргәндәр һәм уға баш эйгәндәр.

Ишек башына ҡаҙаҡлап ҡуйылған ат дағаһы ла беҙгә шул турала һөйләй.Юҡка ғына: дуға бар йортта- доға бар тимәгәндәр.

Беҙҙең эраға тиклем ун етенсе быуатта Көньяҡ Уралда көслө ҡәлғә- ҡалалар барлыҡка килә. Шуларҙың береһе- Арҡайым. Был ҡәлғәлә башҡа кешеләргә ҡарағанда атты күберәк тотҡандар. Ҡала- ҡәлғәләр төҙөүгә Уралға Урта Азия ҡәбиләләренең килеүе булышлыҡ итә. Улар беҙгә Ахур Мазда аллаһы менән яңы зороастризм динен алып киләләр. Был диндең ЙОҒОНТОҺО тураһында Урал батыр һәм Аҡбуҙат эпостарында яҙыла.

Көньяҡ Урал далаларында үҙенең тормошон атһыҙ күҙ алдына ла килтерә алмаған кешелар йәшәгән. Йәйләүҙә йәшәгән кешеләрҙең аттарҙы аҫрау буйынса үҙҙәренең генә алымдары була. Улар аттарҙы һаҡлап алып ҡалыуға һәм аттарҙың сыҙамлылығын үҫтереүгә күп көс һала. Был метод аттарҙың көслө тоҡомло булыуына һәм ҡымыҙ алыу өсөн аттар үҫтереүгә булышлыҡ итә.

**Башҡорт аттарының рус ғәскәрендә һуғышта ҡатнашыуы.**

Бер мең биш йөҙ илле икенсе йылда рус ғәскәрҙәре Ҡазан ханлығын яулап алалар. Иван Грозный башҡорттарға үҙенең ҡанаты аҫтына алыр өсөн тәҡдим яһай. Башҡорттар был тәҡдимде бик йылы ҡабул итәләр, сөнки Рәсәй уларҙы Ноғай ханлығының иҙеүенән ҡотҡарасаҡ. Беренсе булып Рәсәйгә мең ырыуы башҡорттары ҡушыла. Бер мең биш йөҙ илле етенсе йылда башҡорт илселәре рус батшаһы менән осрашалар. Ошо ваҡыттан алып башҡорт атлылары бөтә рус һуғыштарында ла ҡатнаша.

Башҡорт атлыларының актив ҡатнашыуы Ливон һуғышында була. 1611-1612 йылдарҙа башҡорттар Минин һәм Пожарскийҙың ғәскәренә ярҙам итергә булалар һәм поляк интервенттарын еңеп, үҙҙәренең батырлығын к үрһәтәләр.

Батша чиновниктары һәр ваҡыт Иван Грозныйҙың башҡорттарға биргән хоҡуҡтарын боҙалар, ерҙәрен тартып алалар, ғәскәр өсөн тип бик күп аттар һорайҙар. Был ҡыланыштары менән улар ябай халыҡты күтәрелешкә этәрә. Күтәрелеш менән етәкселек итеүҙе үҙ иңдәренә халыҡ араһында дан һәм хөрмәт ҡаҙанған батырҙар ғына ала. Уларҙың исемдәре халыҡтың мәңге хәтерендә ҡалған: Ҡонҡас, Дәүәләй Дәүләтбаев, Айҙар Иҫәнгилдин, Караһаҡал, мулла Алиев.

. 1773-1775 йылдарҙа Крәҫтиәндәр һуғышы башлана. Унын етәксеһе Е.Пугачев була. Баш күтәреүселәр араһында бик күп күренекле шәхестәр була, тик иң батыры С.Юлаев була. Унын атаһы Юлай Аҙналин старшина була.Ун һигеҙ йәшендә Салауат Пугачев ғәскәрендә полковник була. Данлы яугир, йырсы, шағир мәңгелеккә халыҡ хәтерендә һаҡлана. Был

һуғыштарҙа башҡорттар һыбай һәм егеүле ат менан ҡатнаша.

Бер мең ете йөҙ туҡһан туғыҙынсы йылда А.В.Суворовтың Швейцарияға походы ваҡытында башҡорт халҡы ғәскәрҙәре үҙҙәрен һәйбәт яҡтан күрһәтә. Был ҡаҙаныштарға башҡорт атының яҡшы сифатлы булыуы арҡаһында ғына ирешелә. Ун етенсе быуат аҙағынан башҡорт аттары рустарҙың ат заводтарында ғәскәр өсөн файҙалана.

Бер мең һигеҙ йөҙ ун икенсе ЙЫЛҒЫ Парижға еткән ауыр походтан һуң башҡорт атының даны тарала. Башҡорт һыбайлылары бер мең һигеҙ йөҙ ун икенсе йылғы Бөйөк Ватан һуғышы тарихына Төньяҡ Амурҙары тип килеп инә. Башҡорт һыбайлыһын бер нимә алдында ла туктамай: йылға ла, ҡуйы урмандар ҙа, тауҙар ҙа. Кеше үтә алмаған бөтә ерҙән ҡыйыу, сыҙамлы башҡорт аты утә ала.

Башҡорт яугирҙары бер мең һигеҙ йөҙ егерме һигеҙенсе - бер мең һигеҙ йөҙ егерме туғыҙынсы йылда рус- төрөк һуғышында, бер мең һигеҙ йөҙ илле өсөнсө  йылда Кырым һуғышында, бер мең һигеҙ йөҙ илле өсөнсө ЙЫЛҒЫ Бөйөк Ватан һуғышында ла ҡатнаша.

Тарихтан билдәле булыуынса, М.Шайморатов та Бөйөк Ватан һуғышына үҙенең атында тыуған ауылынан уҡ һыбай киткән. Башҡорт аттары 112 –се кавалерия дивизияһын төҙөүҙә ҙур роль уйнай.

## Башҡорт аты

Башҡорт аты СЫҒЫШЫ менән дала һәм урман ЯҒЫ тоҡомдарына ҡарай. "Ҡырҡыу Континенталь климат шарттарында йыл әйләнәһенә көтөүлектә йөрөү хәлендә барлыҡҡа килгән. Башы ҙур, маңлайы киң, муйыны йыуан, ҡыҫҡа, мундаһы түбән, арҡаһы яҫы, тура, арт һыны бер аҙ һалынҡы. Башҡорт аты ун етенсе- ун һигеҙенсе быуаттарҙа уҡ киң билдәле булған. Өфө, Ырымбур губерналарында үрсетелгән, Себерҙең почта юлдарында кин ҡулланылған. Башҡорт тройкалары ла киң билдәле булған. Улар менән һигеҙ сәғәттә йөҙ егерме - йөҙ ҡырҡ км. юл үткәндәр.

Башҡорт ғәскәре ойошторолғанда ла башҡорт аты ҡулланылған, Рәсәй алып барған бөтөн һуғыштарҙа ла урыҫ армияһы башҡорт аты менән тулыландырылған. Башҡорт аты бер мең һигеҙ йөҙ ун икенсе Ватан һуғышында юғары баһа алған. Был һуғышта башҡорт һыбайлылары Парижға тиклем һуғыша- һуғыша барып еткән һәм кире әйләнеп ҡайтҡан. Француз генералы де Марбо үзенең иҫтәлектәрендә былай тип яҙған:” ...башҡорт һыбайлылары өсөн бер ниндәй юл да кәртә була алманы. Улар һағыҙаҡ күсе кеүек һис көтмәгән яҡтан килеп сығыр ине. Уларҙы ҡыуып етеү бик ауыр ине”. Хәрби белгестәр башҡорт атын ҡыйыулығы һәм тәүәкәллеге, тырышлығы һәм идара итеүгә еңеллеге, хужаһына

ышаныусанлығы, шулай уҡ озаҡ ваҡыт шәл сабып һәм йылдам юрғалап барыуға һәләтлелеге кеүек сифаттары өсөн юғары баһалаған. Башҡорттар быңдай йөрөшкә сызамлы аттарҙы махсус күнекмәләр ярҙамында тәрбиәләгәндәр. Башҡорт аты талымһыҙ, сыҙамлы, һыбай йөрөүгә лә, йөк артмаҡлағанда ла, еккән хәлдә лә юғары эш һәләтлегенә эйә.

Башҡорт аты күп үрсем биреүе, һөтлө булыуы менән айырылып тора. Һауын осоронда өс меңгә яҡын һөт бирә. Йыл әйләнәһенә көтөүлектә йөрүгә, ҡырҡ- илле см ҡалынлыҡтағы ҡар аҫтынан үлән тибеп ашауға ла яраҡлашҡан. Бейәләрҙе һәм айғырҙарҙа бер өйөр булып йөрөү ғәҙәте көслө. Был йырткыс хайуандарҙан ышаныслы һаҡланыу мөмкинлеген бирә. Башҡорт аты ауыл хужалығында һәм йөк ташыу эштәрендә, ҡымыҙ яһау һәм ит етештереү өсөн файҙаланыла. Башҡортостандың тоҡомсолоҡ заводтарында башҡорт аты менән тоҡомсолоҡ эше алып барыла. Күп һөтлө Ирәндек тоҡомо сығарылған.

Йылҡы малы төрөнә, йәшенә, енесенә ҡарап айырыла. Уның төҫтәре ерән, ҡыҙыл ерән, һары ерән, саптар, тура, ҡара туры, һоро туры(һор юрға), ҡола, ҡара, күк, күксәй, тимергүк(тимер күк), ҡыҙыл ҡола, аҡ ҡола, һары ат (һарат), бурыл, кир, бүртә, ала ат, алмасыуар.ерән ҡашҡа, йондоҙ ҡашҡа, буҙ ат, аҡ буҙ, күк буҙ.

| Йылҡының йәше | Айғыр малы | Бейә малы |
|---|---|---|
| 1.Яңы тыуған ҡолон | Ҡолон | ҡолонсаҡ |
| 2.Яҙ тыуып, икенсе яҙға сыҡҡан 1 йәшлек мал | Ябаҡ | ябаға |
| 3.Бер йәштән ике йәшкә тиклем йәш мал | ҡырҡмыш тай | бейә ҡырҡмыш |
| 4.Өс йәшкә сыҡҡан мал | Ҡолон | ҡонажын |
| 5.Дурт йәшкә сыҡҡан мал | иркән дүнәл | дунәжен |
| 6.Биш йәшкә сыҡҡан мал | Айғыр | бейә |
| 7.Өйөрҙәге тоҡом айғыры | өйөр айғыры | |
| 8.Дүрт йәштән үтәан 1-се ҡолонлаған бейә | | байтал |
| 9.Өйөргә ҡушылмаған айғыр малы | Һәүерәк | |

| | | |
|---|---|---|
| 10.Биҙәү бейә малы | | тыу бейә |
| 11.Һыналған тоҡом айғыры | аһау (аçау) айғыр | |
| | | |



**Ҡымыҙ- сихри эсемлек.**

Ҡымыҙ- боронғо һәм иң яратҡан башҡорттарҙың эсемлеге. Уның шифалы үҙенселектәре Урал халҡына скиф ваҡытынан таныш. Ҡымыҙ- үпкә, йөрәк, ҡан тамырҙары, быуын, тын юлдары өсөн иҫ китмәле шифалы эсемлек. Иң файҙалыһы- башҡорт тоҡомло бейә һөтөнән эшләнгән ҡымыҙ. Башҡорт тоҡомло йылҡы малы сыҙамлы була. Улар ҡышты тибендә үткәрә, йәйге айҙарҙа ҡылған менән туҡлана.

Ҡымыҙ яһауҙың сере байтаҡ. Бейә дөрөҫ туҡланып, һауынсы уны яратып һауһа, һәйбәт була. Бейә һөтөн һауып алғас та шундуҡ әсетергә һалырға кәрәк. Ағастан яһалған ыҫланған мискәләрҙе әсетеү мотлаҡ. Ҡымыҙ әсеткен урында ғауға, шау-шыу, ығы-зығы булмаҫҡа тейеш.

В.Даль ҡымыҙ тураһында бына нимәләр яҙа: "Ҡымыҙға өйрәнгәс, уйланмайынса уны ғына эсергә теләп тораһың. Ул һыуһынды ҡандыра, тамаҡты ла туйҙыра. Ҡымыҙҙы бер аҙна эскәндән һуң үҙеңде дәртле, һау тояһың, еңел тын алаһың, битең матур төҫ ала. Л. Н.Толстой ҙа Башҡортостанда ҡымыҙ эсеп дауалана. Уның улы үҙенең иҫтәлектәрендә лә яҙа: Ҡымыҙ уға гел шифа, файҙа килтерә. Ул иң ҙур ике кәсәне лә ике ҡуллап тотоп туҡтамайса эсеп бөтә ине. Бер ултырыуҙа һигеҙ кәсә эсә ине.

Беренсе ҡымыҙ менән дауалау учреждениеһы бер мең һигеҙ йөҙ һикһәненсе йылда Аксаков станцияһында асыла. Аҙаҡ Йоматау, Глухов, Шафран шифаханалары асыла. Бөгөнгө көндә Башҡортостан Рәсәйҙең ҡымыҙ менән дауалау буйынса иң ҙУР үҙәге булып тора.

Башҡортостандың тоҡомсолоҡ заводтарында башҡорт аты менән тоҡомсолоҡ эше алып барыла. Беҙҙең Ауырғазы районының Өршәк, Кәбәс, Ташлыкүл хужалыҡтарында ла башҡорт аттары үрсетелә. Тере ауыл проектында ҡатнашыусылар араһында ла ат үрсетеүселәр бар. Быйыл президентыбыҙ беҙҙең районға килде һәм Ғүмәр ауылында йәшәүсе эшҡыуар Илдар Шафиҡов хужалығында булды. Ул һыйыр, ат һәм йорт ҡоштары үрсетә.

**Ат образы**

Ат образы халыҡ ижады жанрҙарында ла, әҙәбиәттә лә киң сағыла. Башҡорт халыҡ риүәйәттәрендә, хикәйәттәрендә ҡанатлы ат- Толпар тураһында бик күп һөйләнелә. “ Аҡһаҡ ҡола”, “"Ҡара юрға”, “ Бишҡолон”, “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу”, “Алпамыша” хикәйәттәрендә ат кешенең тоғро дуҫы итеп һүрәтләнә. Көньяҡ Башҡортостан да яҙып алынған бер риүәйәттә Ғәлиәкбәр тигән бай тураһында былай тип яҙыла: Унының байлығы бик күп була: байҙың ат көтөүе һыу эсергә "Ҡыҙыл йылғаһына төшкәндә көтөүҙең икенсе осо Сыуаш тауының бер яланында туплап йөрөй. Бөрйән районы Ҡана йылғаһы буйындағы Алдар ауылында Алдар Иҫәкәев тигән старшина була. Унының һигеҙ мең аты булған. Элек башҡорттар үҙҙәренең аттарына ырыу тамғаһын эҫе тимер менән төшөрөп ҡуйған, шуға ҡарап аттың ниндәй ырыуға ҡарағанын белеп булған.

Шулай уҡ башҡорт эстрадаһында ат исеме менән бәйле төркөмдәр ҙә бар: Арғымаҡ, Толпар.

Балалар өсөн иң матур журналдарҙың береһенең исеме лә Аҡбуҙат тип атала.

Элек-электән башҡорттар ат бәйгеләре ойошторған. Хәҙерге көндәрҙә һабантуй байрамдарында күреп була. Көньяҡ башҡорттарҙа ҡопҡар уйыны билдәле. Был уйында һыбайлылар кәзәне бер урындан икенсе урынға алып барып ҡуйырға тейеш булған. Уйын һыбайлының да, аттың да көсөнә, таҫыллығына ҡарай, сөнки уйын сәғәттәр буйына алып барыла.

Йыл һайын ат туризмына иғтибар арта. Эйәр өҫтөндә йөрөү организмға шифалы ЙОҒОНТО яһай.

Бөгөн медицинала иппотерапия тигән төшөнсә бар: был кеше куңелен, эске донъяһын ат менән аралашыу аша дауалау тигәнде аңлата. Ә башҡорт халкында был дауалау быуаттар төпкөлөнөн килә, тимәк, ат менән яҡын булған кеше ҡара күңелле була алмай.

Башҡортостанда ат маршрутлы туристик базалар бар: Белорет районында Арташы, Мәләүездә Йәшел имәнкәйҙәр. Башҡортостан буйлап ат санаһы менән маршрут үҙенең үҙенсәлеге менән айырыла. Тау һырттары, Ағиҙел һәм Үҙән йылғалары буйлап, ылыҫлы һәм япраҡлы урмандар араһынан үтеүҙән матурлығын бер ниндәй ҙә еңел машина алыштыра алмаҫ.

Бер мең туғыҙ йөҙ һикһән икенсе йылда Өфөлә Октябрь районында яңы республика ипподромы асыла. Башҡорт халыҡ ижадында данланған ат исеме менән уны «Аҡбуҙат» тип атайҙар. Унда ат сабыштары, экскурсиялар үткәрелә. Бер мең туғыҙ йөҙ туҡһан дүртенсе йылдан ипподром Башҡортостанда республика кимәлендә йылҡысылыҡты үҫтереү һәм атлы спорт сараларын ойоштороу үҙәгенә әүерелде.

Йыл һайын халыҡ театрҙары араһында Алтын тирмә конкурсы үткәрелә. Беҙ уҡытыусыбыҙ менән Архангель районы Өмөт халыҡ театры артистары күрһәткән Н.Ғәйетбаевтың «Аты барҙың - дәрте бар” комедияһын ҡараныҡ. Был комедияла ла ир-аттың нисек итеп атҡа бәйле булыуы,уны үҙенең дуҫы итеп һанауы күрһәтелә.

Шулай итеп, беҙҙең заманда техника бик ныҡ алға китһә лә, ат алыштырғыһыҙ булып кала. Ат дауалай ҙа, йыуата ла, дуҫ та, эшсе лә .

Наил Ғәйетбаев

# «Аты барҙың-дәрте ба

## КОМЕДИЯ

(2 шаршауҙа)



2012